Стәрлетамак районы Рощинский урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Сәлимйәнова Г.Ф., Яппарова Р.Ә.
Кәримова Л.З., Мерәсова А.Н.

# Рус телле балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙә ҡулланылған ҡайһы бер отошло алымдар

*Методик ҡулланма*

БМУИ нәшриәте
Өфө 2009

УДК 373
ББК 74.26 (2Баш)
А 11

**Салимйәнова Г.Ф., Яппарова Р.Ә., Кәримова Л.З., Мерәсова А.Н.** Рус телле балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙә ҡулланылған ҡайһы бер отошло алымдар. Методик ҡулланма. Өфө: БМҮИ нәшриәте. 2009. 28 бит.

Рецензент:
Ғәбитова З.М., *БМҮИ-ның башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы мөдире*

Ҡулланмала авторҙар коллективы рус телле уҡыусыларға башҡорт теленең серҙәренә өйрәтеүгә үҙ тәжрибәһенән отошло эш алымдарын тәҡдим итә.

Авторҙар тарафынан әҙерләнгән мауыҡтырғыс күнегеүҙәр, схемалар, сюжетлы һүрәттәр, картиналар файҙаланыуҙың әһәмиәте ҙур.

© Авторы, 2009.
© БИРО, 2009.

## Инеш һүҙ

Донъяла телдәр бик күп. Кеше ни тиклем күберәк тел белһә, шул тиклем уның рухи донъяһы байыраҡ һәм белем дәрәжәһе киңерәк була. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү балалар өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Бала шәхесенең һәр яҡлы үсеше өсөн матди, рухи шарттар тыуҙырыу, заман талаптарына яуап бирерлек белем һәм тәрбиә биреү –уҡытыусының изге бурысы. Был бурысты тормошҡа ашырыу өсөн башҡорт теле уҡытыусыһы рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрендә белем алыусы уҡыусыларҙың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға тейеш.

Беренсенән, рус мәктәптәрендә уҡыусыларҙың башҡорт телен белеү кимәле бер төрлө түгел. Башҡортса бер аҙ аңлай алғандары менән бергә телде бөтөнләй белмәгән уҡыусылар ҙа бар.

Икенсенән, баланың был тел менән ҡыҙыҡһыныу ҡыҙыҡһынмауы ла ҙур әһәмиәткә эйә.

Ә нисек итеп башҡорт теле дәресенә ҡыҙыҡһыныу уятырға? Башҡорт телен аңламаған балаларға нисек итеп башҡортса һөйләшергә өйрәтергә, нисек уларға аңлы уҡыу, яҙыу, һөйләү күнекмәләрен бирергә һуң?

Әлбиттә, был уҡытыусының оҫталығынан, ижади эшләүенән тора.

Һуңғы йылдарҙа ғалимдар, уҡытыусылар тарафынан башҡорт телен өйрәнеүҙә белем кимәлен күтәреүмаҡсатында төрлө методик ҡулланмалар, әсбаптар, дидактик материалдар, күргәҙмәлектәр тәҡдим ителә. Бындай ҡулланмаларҙың барыһы ла, үҙ сиратында, уҡытыусыға ҙур ярҙам булып тора.

Беҙ ҙә , үҙебеҙҙең эш тәжрибәһенән сығып, башҡорт телен өйрәнеүҙә ҡулланылған ҡайһы бер отошло алымдарҙан торған йыйынтыҡ тәҡдим итәбеҙ.

Бында алынған белемде, күнекмәләрҙе нығытыу, тәрәнәйтеү өсөн дидактик уйындар, теге йәки был теманы еңел үҙләштереү өсөн төрлө эш төрҙәре индерелде.

Ҡулланманы төҙөгән саҡта ҡайһы бер методик хеҙмәттәр ҙә файҙаланылды.

Авторҙар

## I. Фонетик –артикуляцион күнегеүҙәр

Уҡыусыларҙа башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен баштан уҡ дөрөҫ әйтергә өйрәтеү мотлаҡ. Сөнки, дөрөҫ әйтеү – дөрөҫ яҙыуҙың төп нигеҙе. Бала дөрөҫ әйтмәй тороп, дөрөҫ яҙырға өйрәнә алмаясаҡ. Был уҡыусыларҙың телдәге өндәрҙе ишетә, еңел үҙләштерә алыу һәләтенә бәйле. Башҡорт һәм урыҫ телдәрендә әйтелештәре яғынан оҡшаш өндәрҙе өйрәтеү уҡытыусыға артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Әммә башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен үҙләштереү еңелдән түгел. Шуға ла был өндәрҙе өйрәнеү һәр дәрестә ныҡлы урын алырға тейеш. Балалар өндәрҙе уҡытыусыға эйәреп әйтеп өйрәнәләр. Өндәрҙе әйткәндә телмәр ағзаларының (тел, тел осо, теш, тамаҡ, ирендәр) эш-хәрәкәтен күҙәтеү файҙалы. Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр үткәргәндә мәҡәл, тиҙәйткес, кескәй генә дүрт юллыҡ шиғырҙар ҡулланырға була.

1. Башҡортса һөйләшеү алдынан балаларҙың телдәрен шымартыу өсөн дәрес башында кескәй шиғырҙар ҡулланыу яҡшы.. Тәүге осорҙа ҡулланыу өсөн әҙер тел төҙәйткестәр ҡулланһаҡ, һуңынан уҡыусылар үҙҙәренең дә тел төҙәйткестәрен төҙөйҙәр.

а) Ҙа-ҙа-ҙа – йәшәйем Рощинскийҙа
Да-да-да – Стәрлетамаҡ районында
Дә-дә-дә - Юрматылар ерендә
Матур башҡорт илендә.

б) Та-та-та – Айгөл ҡурсаҡ уйната.
Та-та-та-Ул бейергә ярата.
Ты-ты-ты – Ул ярата курсаҡты.
То- то –то – Ҡурсаҡ ҡулынан тотто.

2. Телмәрҙә һәм яҙыуҙа хаталанмаҫ өсөн, дәрестә дөрөҫ һөйләгән һәм яҙған уҡыусынан өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен аңлатыу. (Уҡытыусы ролендә уҡыусы)

**һ** менән **Х** айырмаһын аңлата.

<u>**һ**</u> – һауа ҡаршылыҡһыҙ, йомшаҡ, ә <u>**х**</u> – тамаҡ төбө менән ҡалтырауыҡлы ҡаты ишетелә. Мәҫәлән : һан – хан, һат - хат һ.б

3. Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығы тәҡдим иткән "Башҡорт алфавиты" (2005) тигән күргәҙмәлекте ҡулланыу өндәрҙе, грамматиканы өйрәнгәндә бик отошло.

а) өндәрҙе әйтергә өйрәтеү
б) һүҙҙәр эсендә әйтеү



в) әйтеп өйрәнелгән өндө оҡшаш өндәр менән бутауҙы иҫкәртеү(һүрәттәр)

Шаҡмаҡтар урынына тейешле хәреф ҡуйырға (ә-е)

| | | |
|---|---|---|
| әлифба | | лифба |
| әфлисун | | флисун |
| әтәс | | тәс |
| әлморон | | лморон |




4. Уҡытыусы алдан тик һуҙынҡылар ғына яҙылған карточкалар әҙерләй. Карточкларҙы балаларға берәмләп күрһәтә бараһың, ә балалар өндө әйтәләр. Һуңынан уҡытыусы төрлө тартынҡыларҙы әйтә (күберәк башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре алына), ә балалар уҡытыусы артынан ҡабатлап был тартынҡы артынан күрһәтелгән һуҙынҡыны ла әйтергә тейештәр. Мәҫәлән:

| | | | |
|---|---|---|---|
| ө | һө<br>тө<br>ғө<br>лө<br>ңө<br>ҫө | ә | ңә<br>тә<br>ҡә<br>ҫә<br>һә<br>сә |

5. Карточкала бирелгән һүҙҙәр өҫтөндә эш алып барыла. Бер нисә дәрестән һуң һүҙлек диктанты яҙҙырыла.

6. "Кем күберәк?" уйыны. Хәрефтәрҙе үтеп бөткәндән һуң, уҡытыусы һүрәттәрҙе күрһәтә бара, балалар хәтерҙәрендә ҡалған һүҙҙәрҙе яҙалар. Мәҫәлән: башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәренә хас булған хәрефтәргә 24 һүрәт бирелгән. Һәр уҡыусы 24 һүҙҙе лә дөрөҫ яҙһа - "5" билдәһе, 20-нән әҙ булһа – "4" билдәһе ҡуйыла.

Башҡа хәрефтәр менән дә ошондай эш төрҙәре башҡарыла. Был балаларҙың һүҙлек байлығын арттырыуға килтерә.

7. Эш алымын ҡатмарландырып, төрлө һүҙбәйләнештәр төҙөлә. Мәҫәлән: "С + И"(сифат + исем), "И + Ҡ"(исем + ҡылым), "һ + И"(һан + исем).

"Е" хәрефе :
ҡыҙыл еләк,
тәмле еләк
өс еләк
Ер шары
еләк үҫә




8. Һүрәттәргә тура килтереп мәҡәл-әйтемдәр әйтеп, йомаҡтар ҡойоп китергә була.

Мәҫәлән : Икмәктән оло булма.
Айырылғанды - айыу ашар,
Бүленгәнде - бүре ашар.
Йәйен урманда батша,
Ҡышын – ҡарҙан да аҫта . (айыу)
Ат – тауҙа, егет – яуҙа беленер



9. Башҡорт теленә генә хас хәрефтәрҙән ижектәр төҙөтөү.

| | | |
|---|---|---|
| ғә | ғө | ғү |
| ҡә | ҡө | ҡү |
| ҫә | ҫө | ҫү |
| ңә | ңө | ңү |
| һә | һө | һү |
| ҙә | ҙө | ҙү |

1) ижектәрҙе рәт буйынса уҡыу, бағаналап уҡыу (өҫтән аҫҡа, аҫтан өҫкә);
2) диагональ буйынса уҡыу;
3) көйләп уҡыу (мәҫәлән : "Тышта ҡар яуа" көйөнә);
4) бирелгән ижектәр менән һүҙҙәр уйлатыу.
Мәҫәлән : ҡәләм, ғөрөф-ғәҙәт, ниңә, һүҙ, һәнәк, һөңгө һ.б.
5) ошо ижектәре булған һүҙҙәрҙе һүҙлектәрҙән таптырыу.

10. Башҡорт теле орфографияһының төп принцибы булып фонетик принцип һанала. Шуға күрә дәрестәрҙә оҡшаш **һ-х, ҡ-к, ҫ-с, ҙ-з, ө-о, ү-у** өн-хәрефтәре өҫтөндә эште ныҡлы алып барыу мотлаҡ. Был өндәрҙе бер-береһенән айырыу, әйтелештәрен үҙләштереү өсөн дәрестәрҙә ошо өндәр булған һүҙҙәр менән эшләү бик отошло. Мәҫәлән: һаҡ-хаҡ, тор-төр, тос-төҫ, була-бүлә, ҡаза-ҡаҙа.

11. Һүҙлек диктанты яҙҙырһаң да була. Башта балалар дәфтәрҙәрен бағаналарға бүләләр һәм һәр бағанаға тейешле хәреф яҙыла:

| з | ҙ | х | һ | ғ | г |
|---|---|---|---|---|---|
| зәңгәр<br>зифа<br>кәзә | ҙур<br>боҙ<br>ҡыҙҙар | хаҡ<br>бәхет<br>хужа | һыу<br>һөт<br>һатыусы | саған<br>сәғәт<br>бағана | гөл<br>иген<br>бөгөн |

Уҡытыусы һүҙҙәрҙе уҡый, ә уҡыусылар был һүҙҙәрҙе тейешле бағаналарға яҙалар. Эш аҙағында бергәләп тикшереп китеү ҙә отошло, сөнки балалар үҙ хаталарын үҙҙәре төҙәтә һәм был һүҙ бала хәтерендә нығыраҡ һаҡланып ҡала.

12. Яҙма эштәр алдынан үҙенсәлекле өндәрҙе ҡабатлап китеү кәрәк. Бында сингармонизм законына нигеҙләнеп төҙөлгән таблица – уҡыусыларҙың төп таяныСы. *Ҡ* һәм *К* хәрефтәре менән яҙылған һүҙҙәрҙе тикшергәндә ҡ менән ҡалын, ә к менән нәҙек һуҙынҡыларҙың йәнәш йөрөүҙәре әйтелә.

Ә бына ошондай терәк-схема уҡыусыларҙың һәр ваҡыт күҙ алдында тора:




Был терәк-схема хаталар өҫтөндә эшләгәндә лә ныҡ ярҙам итә.

12. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы өйрәнгәндә (сингармонизм законына таянып) һүҙҙәрҙе "һүтеп йыйыу" ҙа уҡыусыларға ҡыҙыҡлы бер эш төрө булып тора. Уҡытыусы уҡыусыларға һүҙ әйтеп яҙҙырта. Балалар был һүҙҙе ижекка бүлеп яҙып ҡуялар. Һуңынан һүҙҙәге һуҙынҡыларын айырым , тартынҡыларын айырым яҙып һүҙҙең ҡайһы схемаға тап килеүен билдәләйҙәр. Мәҫәлән:

Алмағас – ал/ма/ғас - а, а, а; л/м./ғ.с (1-се схема)
Күбәләк – кү-бә-ләк – ү, ә, ә; к./б./л.к (2-се схема)

### II. Һүҙҙәр менән эш

Билдәле бер телдә һөйләшеү өсөн, кеше шул телдең һүҙҙәрен үҙләштерергә тейеш. Шуға күрә лә рус мәктәптәрендә уҡыусыларҙың телмәрен байытыуға һәм өйрәнелгән һүҙҙәрҙе актив ҡулланырға өйрәтеү ҙә төп бурыстарҙың береһе булып тора. Сөнки һүҙҙәрҙән башка бер ниндәй ҙә аралашыу, һөйләшеү, уҡыу, яҙыуҙың булыуы мөмкин түгел. Айырыуса һүҙлек өҫтөндә эшләүгә башланғыс синыфтарҙа күберәк ваҡыт бүлергә кәрәк. Сөнки был йәштә балалар тиҙ хәтерҙә ҡалдырыусан. Яңы һүҙҙәр өҫтөндә эшләү балаларҙың телмәр запасын байыта. Дәрес һайын 4-5 яңы һүҙ алып, тәржемә итеп, яҙылышы өҫтөндә эшләһәң, һөйләмдәр төҙөтһәң, был һүҙ ныҡыраҡ хәтерҙә ҡала. Тағы ла шуны иғтибарға алырға кәрәк, башланғыс синыфтарҙа дәрестәрҙең тематик бирелеше лә уларҙың һүҙ запасын арттырыуға булышлыҡ итә. Мәҫәлән, "Ғаилә", "Һандар", "Тән өлештәре", "Кошһтар", "Хайуандар", "Төҫтәр", һ. б. темаларҙы өйрәнгәндә һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәрҙәренә яҙып алып ятлаһаҡ, өлкән синыфтарҙа был һүҙҙәрҙе ҡабатлап, иҫкә төшөрөп кенә китергә тура киләсәк. Бер үҙенсәлек, һүҙлек дәфтәрҙәрендәге һүҙҙәрҙе темаларына ҡарап номерлап барыу. Был ысул балалар өсөн дә, уҡытыусы өсөн дә бик уңайлы. Һәр кемдең ниндәй темаға ҡараған һүҙҙе нисек үҙләштереүе күренеп тора. Тағы ла бер ыңғай яғы - кәрәкле темаға ҡараған һүҙҙәрҙе тиҙ табып иҫкә төшөрөп китергә була.



Яңы һүҙҙәрҙе ныҡыраҡ хәтерҙә ҡалдырыу өсөн уйын элементтары ҡулланыу ҙа отошло. Уйында еңер өсөн берәй һүҙ, һөйләм әйтергә кәрәк икән, бала уларҙы хәтерләргә күп көс сығармай, ярыш сәме уны тиҙ һәм дөрөҫ әйтергә мәжбүр итә, психологик ҡаршылыҡтарҙы юкҡа сығара. Һөҙөмтәлә ана шул һүҙҙәр, һөйләмдәр баланың телмәренә килеп инә. Шулай итеп бала был һүҙҙәрҙе үҙләштерә. Шуларҙың бер-нисәһендә туҡталып китәйек.

1. "Был нимә?" уйыны.

Уҡытыусы ҡулына бер темаға арналған предметлы һүрәттәр ала. Уҡыусыларға күрһәтмәй, беренсе карточкала ниндәй һүрәт төшөрөлгәнен һорай. Балалар бер-бер артлы шул темаға ҡараған һүҙҙәр әйтәләр. Кем дөрөҫ әйтә, шул уйынды алып бара. Уны яңы тема үткәндән һуң йәки ҡабатлау дәресендә лә уйнарға була.

2. "Телевизор" уйыны. Был уйын "Башҡорт телен өйрәнәйек" тапшырыуына таянып әҙерләнә. Телевизор (макет) аша уҡыусы һүрәттәрҙе күрһәтеп , дикторҙарға оҡшатып әйтергә өйрәтә.

3. "Автобуста" уйыны.

а) Уйын "Һан" темаһын өйрәнгәндә ҡулланыла. Һанды яҡшы үҙләштергән бала "кондуктор" була. Ул балаларҙың билетын тикшерә. Билеттарҙа урындар һүҙ менән күрһәтелгән, ә урындарҙа һан менән яҙылған. Бала үҙ урынын табып ултырырға тейеш.

б) Ошо уҡ уйын барышында диалог төҙөп китергә лә мөмкин. Бының өсөн бер урынға ике билет һатылыуы мөмкин . Диалог:

- Ғәфү итегеҙ, был минең урын.
- Юҡ, был минең урын.
-Һинең нисәнсе урын?
-Бишенсе . Бына билет.
-Минең дә бишенсе урын.Бына билет.
-һ.б

4. "Парын тап!" уйыны .

А) Тактала ике бағанала һүҙәр яҙыла. Беренсе бағанала башҡортса, ә икенсе бағанала рус телендә. Уҡыусылар ошо бирелгән һүҙәрҙең парҙарын табырға тейештәр.

Мәҫәлән:




Б). Киҫмә карточкаларҙан парҙарын йыйыу ҙа бик отошло:

| | |
|---|---|
| 356 | Ике мең һигеҙ |
| 903 | Бер мең ике йөҙ һикһән ете |
| 1287 | Өс йөҙ илле алты |
| 4947 | Дүрт мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ ете |
| 2008 | Өс йөҙ илле алты |

5. "Домино" уйыны.

6. "Төркөмдәргә бүлеп яҙ". Уҡыусыларға конверт менән төрлө темаға ҡараған һүҙәр бирелә. Мәҫәлән: емеш-еләк, йәшелсәләр. Бер конвертҡа "Борщ", ә икенсеһенә "Компот" тип яҙылған. Тимәк, балалар һүҙәрҙең кәрәктәрен генә айырып алып билдәле бер конвертҡа һалырға тейеш (йә дәфтәрҙәренә яҙып эшләйҙәр).







7. "Йәбешәме?" Уҡытыусы бер һүҙ әйтә. Уҡыусы әйткән һүҙҙең һуңғы хәрефенә башланған һүҙ уйлай. Ҡалған уҡыусылар шул уҡ тәртиптә бер-бер артлы дауам итә. Мәҫәлән: мәктәп – парта – аҡбур – ручка - альбом һ.б.

Шул уҡ тәртиптә "Паровоз" уйынын да ятатып уйнайҙар. Был уйын барышында темалар буйынса кем күберәк һүҙ әйтеү буйынса ярыш ойошторола. Юғары синыфтарҙа һүҙҙең дөрөҫ яҙылышына ла иғтибар ителә. Әгәр һүҙ дөрөҫ яҙылмаған икән, сылбыр өҙөлә.

8. Тағы бер мауыҡтырғыс алым – уҡытыусының хатаһын төҙәтеү. Магнит тактала бер темаға ҡараған һүрәттәрҙе ҡуйып, аҫтарына бутап һүҙҙәрен ҡуйып сығаһың. Балалар быңдағы хатаны төҙәтергә тейеш.








9. "Үҙ оянды тап" .Уҡытыусы йорт хайуандары, йорт ҡоштары, һәм ҡырағай хайуандар исемдәре яҙылған карточкалар әҙерләй. Синыф өс командаға бүленә:

1. Йорт хайуандары
2. Йорт ҡоштары
3. Ҡырағай хайуандар

Уҡытыусы карточкаларҙы яҙылулы яҡтары менән өҫкә ҡаратып теҙеп һала, һәр карточкала бер генә һүҙ яҙылған була. Уҡыусылар сиратлап үҙ капитандарына карточкаларҙы ташый. Ҡайһы команда үҙенең төркөмөнә ҡараған карточкаларҙы дөрөҫ йыйнай, шул еңеүсе була.

Шулай уҡ, үрҙә күрһәтелгән тәртиптә баш, өҫ, аяҡ кейемдәре; үләндәр, ағастар, ҡыуаҡтар; йәшелсәләр, емештәр һәм башҡа предметтарҙы төркөмләү буйынса йомғаҡлау дәресе үткәрелә.

### IV. Шиғырҙы тиҙ ятлау алымдары

Уҡыу һәләтен үҫтереүҙә лә төрлө күнегеүҙәр ҡулланырға була: тиҙәйткестәр, мәҡәлдәр, диалогтар, ҡеҫкә шиғырҙар ятлау. Уҡыусыларҙы шиғырҙы дөрөҫ интонация менән уҡырға, ятларға, һөйләргә өйрәтеүе бик еңелдән түгел. Сөнки шиғырҙы тиҙ ятлау өсөн уның мәғәнәһен аңларға кәрәк, ә рус телендә генә аралашҡан балалар өсөн был бик ауыр. Ҡыҙыҡһындырыу маҡсатында шиғыр ятлауҙа төрлө ысулдар ҡулланып схемаға, һүрәткә ҡарап ятлау, шиғыр юлдарындағы һүҙҙәрҙең хәрефтәрен юйып, тестар ярҙамында һүҙҙәрен алмаштырып та ятлатырға була.

1. Шиғырҙы һүҙҙәрҙең беренсе хәрефтәре ярҙамында ятларға өйрәтеү.

Был алым балаларҙа хәтерҙе, иғтибарҙы, яҙыу күнекмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Шиғыр таҡтаға яҙыла. Шиғырҙы ятлар алдынан һүҙҙәр өҫтөндә эш алып барыла. Һуңынан шиғыр юлдарын хор менән уҡыйбыҙ. Артабан бер нисә һүҙҙең тәүге хәрефтәрен генә ҡалдырып ҡалған хәрефтәрен һөртәбеҙ һәм бергәләп уҡып ҡарайбыҙ. Тағы ла бер нисә һүҙҙең тәүге хәрефтәрен генә ҡалдырып һөртәбеҙ. Эш шулай дауам итә. Шиғырҙағы һүҙҙәр аҙайған һайын уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуы арта. Яйлап таҡтала һәр һүҙҙең тәүге хәрефтәре генә тороп ҡала. Шиғыр тағы бер ҡат хор менән уҡыла һәм эш аҙағында шиғырҙы берәмләп һөйләйҙәр.

| **Беҙҙең баҡса** | **Беҙҙең баҡса** |
|---|---|
| *Беҙҙең баҡсаны* | *Б......... б.........* |
| *Ҡоштар ярата* | *Ҡ....... я........* |
| *Унда еҫле гөл* | *Унда еҫле гөл* |
| *Сәскәләр ата.* | *Сәскәләр ата.* |



| **Беҙҙең баҡса** | **Беҙҙең баҡса** |
|---|---|
| *Б......... б.........* | *Б........б..........* |
| *Ҡ......... я.......* | *Ҡ........ я.........* |
| *У...... е.......г....* | *У...... е..... г.....* |
| *Сәскәләр ата.* | *С.............. а....* |

2. Һүҙҙәр урынына һүрәттәр ҡуйып ятлау.

Шиғыр таҡтаға яҙыла. Шиғыр менән танышып, һүҙлек өҫтөндә эшләгәндән һуң ҡайһы бер еңел һүҙҙәр (күберәген предмет исемдәре) һүрәттәр менән алыштырыла. Уҡыусылар шиғырҙы һүҙҙәрҙе ошо һүрәттәргә ҡарап уҡырға тейеш.

**Яҙғы сәскәләр**
Ал сәскә лә бал бирә,
Аҡ сәскә лә бал бирә,
Һарыһы ла бал бирә-
Барыһы ла бал бирә.

## Яҙғы сәскәләр



3. Сюжетлы картиналар буйынса ла шиғырҙы ятлау алымын ҡулланырға була. Мәҫәлән 5-се синыф уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән "Башҡорт теле" дәреслегенең 103 –сө битендәге 254–се күнегеү. И. Ғүмәрованың "Уңған ҡыҙ" шиғыры буйынса эш. Дәрескә шиғырҙың һәр бер юлына ҡарата сюжетлы һүрәттәр әҙерләнә. Шиғыр өҫтөндә эшләгәндән һуң (һүҙлек эше, тәржемә) уҡыусыларға сюжетлы һүрәттәр тәҡдим ителә. Эш төрҙәре ошондай булырға мөмкин:

1. Уҡыусылар һәр юлға ҡараған тейешле һүрәттәрҙе табалар.
2. Һүрәт буйынса шиғыр юлдарын иҫкә төшөрөү.
3. Бутап бирелгән һүрәттәрҙе уҡыусылар тәртипкә килтерәләр.



**Уңған ҡыҙ**

Гөлшат бөгөн иртә торҙо,
Ҡулын, битен, тешен йыуҙы.
Сәсен үреп, таҫма таҡты,
Гөлдәргә һыу һибеп ҡуйҙы.
Урынын да йыйыштырҙы,
Үҙе бөгөн шундай шат.
Ана ниндәй етеҙ баҫып,
Мәктәпкә бара Гөлшат.

(И. Ғүмәрова.)



Гөлшат бөгөн иртә торҙо,



Ҡулын, битен, тешен йыуҙы. Сәсен үреп, таҫма таҡты,



Гөлдәргә һыу һибеп ҡуйҙы. Урынын да йыйыштырҙы,



Үҙе бөгөн шундай шат.

Ана ниндәй етеҙ баҫып,
Мәктәпкә бара Гөлшат.

3. Шиғырҙарҙы тест ярҙамында ятлау.

Бының өсөн уҡытыусы алдан шиғыр буйынса тестар әҙерләй. Теста шиғырҙың ниндәйҙер өлөшөнән һүҙҙәр алына. Ә ул һүҙҙәр урынына бер нисә вариант тәҡдим ителә. Тәҡдим ителгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр араһында дөрөҫ вариант та бирелә. Уҡыусылар был вариантты табып уҡырға тейеш. Мәҫәлән: С. Әлибаевтың "Матур көн" шиғыры. ("Башҡорт теле" 7 синыф. Авторҙары: Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ., Вәлишина Л.Ғ.. 75 бит, 98-се күнегеү.)

1) Ыңйы-ыңйы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн!
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.

| | |
|---|---|
| Ыңйы-ыңйы … … | а) ямғыр яуа; |
| | б) ҡарҙар яуа; |
| | в) боҙҙар яуа. |
| Ғәжәп … көн бөгөн! | а) сибәр; |
| | б) насар; |
| | в) матур. |



| | |
|---|---|
| Ҡулға тотоп … килә | а) китке; |
| | б) алғы; |
| | в) барғы. |
| Ҡарҙың һәр … бөртөгөн. | а) өс; |
| | б) ун; |
| | в) бер. |

"Ҡыш" шиғыры. ( "Башҡорт теле" 4 синыф. Авторҙары : Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., 110 бит, 163- сө күнегеү.)

2) Кемдер бында саңғы шыуа,
Кемдер ҡар бабай яһай,
Кемдер ҡарға ятып аунай,
Кемдер ҡысҡырып илай.

| | |
|---|---|
| Кемдер бында … | а) сана шыуа |
| | б) коньки шыуа |
| | в) саңғы шыуа |
| Кемдер бында … яһай, | а) Ҡыш бабай; |
| | б) ҡар бабай; |
| | в) Ҡарһылыу. |
| Кемдер бында … ятып аунай, | а) ергә; |
| | б) боҙға; |
| | в) ҡарауатҡа |
| Кемдер ҡысҡырып … | а) йырлай; |
| | в) илай; |
| | в) һөйләй |

## V. Һөйләү телмәрен үҫтереү

Һөйләү телмәрен үҫтереү бөтә дәрестәрҙә лә иғтибар үҙәгендә тора. Схемалар,сюжетлы һүрәттәр, картиналар файҙаланыуҙың әһәмиәте ҙур. Өйрәнгән һүҙҙәрҙе нығытыу, телмәрҙә актив ҡулланыу, дөрөҫ һөйләшеү өсөн төрлө эш алымдары тәҡдим итергә мөмкин.

1. Башҡорт телен өйрәнгәндә "Морфология", "Синтаксис" бүлектәренә ҡағылмай китеү мөмкин түгел. Ни тиклем ҡатмарлы булмаһын, уҡыусыларға исем, сифат, ҡылым, эйә, хәбәр, тултырыусы һәм башҡа терминдарҙы үҙләштерергә тура киләсәк. Рус телле балалар башҡортса ниндәйҙер һөйләм әйтер өсөн тәүҙә һөйләмде рус телендә төҙөп, шунан башҡортсаға әйләндерәләр. Бында башҡорт теленең һөйләмдәге һүҙҙәр тәртибе тураһында белмәй тороп, дөрөҫ итеп һөйләм төҙөп булмай. Бигерәк тә хәбәрҙең урынын бутайҙар, сөнки башҡорт телендәге һөйләмдәрҙә эйә

һөйләмдең башында, ә хәбәр аҙағында килә. Ошо үҙенсәлекте белмәгән йәки телмәрҙә күҙәтмәгән уҡыусылар хәбәрҙе рус теленең нормаларына таянып эйәне алда ҡуя. Бындай хаталарҙан ҡотолор өсөн төрлө схемалар, моделдәр файҙаланып була.

Мәҫәлән:

*Зилә* *ултыра.*

*Зилә* *ултырғыста* *ултыра.*

*Зилә* *артлы* *ултырғыста* *ултыра.*

*Беҙҙең* *Зилә* *артлы* *ултырғыста* *ултыра.*

2. Картиналар һәм һүрәттәр буйынса бирелгән һорауҙарға тулы яуап талап итеү кәрәк. Ә нисек итеп был маҡсатҡа ирешергә һуң? Өйрәтеү эштәрен башланғыс синыфтарҙа уҡ башларға кәрәк. Баланы нисек өйрәтәһең, ул шулай ғәҙәтләнә. Картиналар һәм һүрәттәр менән эшләгәндә һорауҙар таҡтаға яҙыла. Эш этаплап башҡарыла.

а) Беренсе этап – һорауҙарҙы уҡыу һәм аңлау. Икенсе этап – һөйләмдә һорауҙы белдергән һүҙҙәрҙе таптырып аҫтына һыҙҙырыу. Өсөнсө этап – ошо һорау һүҙҙәр урынына яуап һүҙҙәрен ҡуйып уҡыйбыҙ. Һөҙөмтәлә беҙ көткән яуап килеп сыға.

- *Балалар ҡайҙа сыҡҡандар?* *Балалар урманға сыҡҡандар.*
- *Урамда көн нисек?* *Урамда көн аяҙ.*

б) Ябайҙан ҡатмарлыға принцибы буйынса тәүҙә йыйнаҡ һөйләмдәр уйланыла. Мәҫәлән:

*Ҡыш етте . Балалар уйнай.*

Уҡыусылыр һөйләмдәрҙе йыйнаҡтан таркау һөйләмгә әйләндерәләр. Ошондай эш төрөн тәҡдим итергә лә була.

Мәҫәлән:

А.(аныҡлаусы) Э. (эйә) Т. (тултырыусы) Х.(хәл) Х.(хәбәр)

3. Һүрәт буйынса балалар ниндәй һүҙҙәр белә, барыһын да яҙабыҙ, ҡабатлайбыҙ.

**Көҙ.**

| Нимә? | Ниндәй? | Ни эшләй? |
|---|---|---|
| Яҙ | йәмле | килде |
| Ҡош | йылы | йәшәрә |
| Ағас | төрлө | китә |
| Йылға | аяҙ | ҡайта |



Ошо һүҙҙәрҙе ҡулланып тәүҙә ябай һөйләм төҙөлә, һуңынан һөйләмдәрҙе ҡатмарландырып таркатабыҙ.

*Яҙ килде.*

*Йәмле яҙ килде.*

*Тыуған еремә йәмле яҙ килде.*



4.Йыл миҙгеленең билдәләрен сағылдырған айырым һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөлә. Һуңынан ошо темаға тура килгән бер картина өҫтөндә эш дауам ителә.






5. Төҙәгән һөйләмдәр матур сыҡһын һәм телмәрҙе байытыу өсөн уҡытыусы төрлө һүрәтләү саралары тәҡдим итә. Уҡыусы үҙе һайлап һөйләмен байыта.

*(ниндәй?) Ҡар* — *(нисек?) яуа.*

*Аҡ*
*Көмөш кеүек*
*Ынйы кеүек*

*ябалаҡлап*
*әкрен генә*
*бәүелеп*
*күбәләкләп*
*өйөрөлөп*





6. Картиналарҙан балалар хаталар эҙләй. Рәссам һүрәттә ниндәй хата ебәргән?





## VI. Тестар

Төрлө тестар балалар тарафынан яратып үтәлә. Тестар эш төрҙәрен төрләндерергә ярҙам итә. Варианттар менән тиҙ арала уҡыусыларҙың материалды үҙләштереүен дә тикшереп була.

**Тест № 1.**

1. Хаталы юлды табығыҙ.

*Баҡсала, китап, дәрес, уҡыусы, мәктәп.*

*Шиғыр, аҡса, алма, ҡульяулыҡ, бөгөн.*

*Икмәк, һаумыһығыҙ, айыу, кеҫәлек.*

2. Ялғауы дөрөҫ яҙылмаған һүҙҙе табығыҙ.

*А) балалар, әсәләр, ҡәләмдәр.*

*Б) аттәр, урамдар, буранңәр.*

*В) уҡыйҙар, килеләр, байҙар.*

**Тест № 2.**

Тексттың йөкмәткеһен асыҡлау. А. Ғирфановтың "Ҡайын" хикәйәһе. 3 синыф.

1. Балалар ҡайҙа ағас ултырттылар

*а) мәктәп тирәләй;*

*б) урам буйлап;*

*в) өй янында?*

2. Уҡыусылар ниндәй ағас ултырттылар:

*а) тирәк;*

*б) ҡайын;*

*в) ҡарағай?*

3. Айҙарҙың ҡайыны ҡайҙа тура килде:

*а) уртаға;*

*б) ситкә;*

*в) мейешкә?*

4. Айҙарҙың ағасына нимә булды:

*а) машина тапаны;*

*б) һынды;*

*в) кәзә ашаны?*

5. Хатаны нисек төҙәттеләр:

*а) ағасты бәйләп ҡуйҙылар;*

*б) янынан ултырттылар;*

*в) икенсе урынға ултырттылар?*



**Тест № 3.**

Әгәр һөйләм текстың йөкмәткеһенә тура килһә "+" тамғаһы, тап килмәһә "-" тамғаһы ҡуйыла. Мәҫәлән, "Иренгән ике эшләр" әкиәте.

1. Малайҙың исеме Самат (+)
2. Самат бөтә эште лә еренә еткереп эшләй.
3. Сарҙаҡтағы бойҙайҙы болғатмай төшә.
4. Ул атаһын алдай.
5. Атаһы Саматҡа яңы итектәрҙе бирҙе.

**Тест № 4.**

Исем.

1. Предметты белдергән һүҙҙәр нисек атала:

а) сифат б) ҡылым в) исем?

2. *Дәфтәр* һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай:

а) сифат б) ҡылым в) исем?

3. Исем ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай:

а) ниндәй? б) ни эшләй? в) кем? Нимә?

4. Уртаҡлыҡ исемде күрһәт:

а) Өфө б) Ҡаҙ в) Ағиҙел?

5. Яңғыҙлыҡ исемде күрһәт:

а) Урман б) Өй в) Асылыкүл?

6. *Мәктәп* һүҙенә ниндәй ялғау ҡушыла:

а) –лар б) –тар в) –тәр г) –ҙар?

7. Башҡорт телендә нисә килеш бар:

а) 5 б) 6 в) 7?

8. *Алайҙың* һүҙе ниндәй килештә тора:

а) төп к. б) Сығанаҡ к. в) Эйәлек к.?

9. *Күлдәгем* һүҙе ниндәй затта:

а) I б) II в) III?

## VII. Мауыҡтырғыс күнегеүҙәр

Дәрестәрҙә йомаҡтар, чайнвордтар, кроссвордтар, ребустар һәм башҡа шундай ҡыҙыҡһындырыусы саралар балаларҙың уйлау, фекерләү, эҙләнеү һәләттәрен асырға ҙур мөмкинлектәр бирә. Ҡайһы бер теманы үткәндән һуң, уҡыусылар үҙҙәре лә бик ҙур теләк менән кроссвордтар төҙөйҙәр.

**Кроссвордтар.**

1) Мәҫәлән, "Юлдыбай" әкиәте буйынса кроссворд төҙөү. 3 синыф.

1. Әкиәттең төп геройы. (Юлдыбай)
2. Атаһының исеме. (Янһары)

3. Атаһының һөнәре. (һунарсы)
4. Өс һунарсыға осраған ҡырағай хайуан.(айыу)
5. Юлдыбайҙы кем тип йөрөтәләр? (батыр)
6. Иптәштәрен нисек атайҙар? (ҡурҡаҡ)




2) 8-се синыф. "Яҙ. Тултырыусы." темаһы буйынса кроссворд. Бирелгән һүҙҙәрҙең тәржемәһен шаҡмаҡтарға яҙып сығығыҙ. Кроссвордты дөрөҫ итеп тултырһағыҙ, вертикаль буйынса бөгөн беҙ һөйләшкән теманы белерһегеҙ.




1) Природа (тәбиғәт)
2) Ручеек (гөрләүек)
3) Подснежник (умырҙая)
4) Скворец (сыйырсыҡ)
5) Капля (тамсы)



**Ребустар**

Был ребустарҙа башҡорт халыҡ мәҡәлдәре йәшеренгән.

1.




**Тыуған илем – иркә гөлөм**

2.




**Себешпе күҙ һанайҙар**

3.




**Һаулыҡ – ҙур байлыҡ**

4.




**Сит илдең ере йәмһеҙ, һыуы тәмһеҙ**



## Йомғаҡлау

Бөтә был материалдарҙы балаларҙың аңына еткереү өсөн күп көс, ваҡыт, түҙемлелек талап ителә. Әлбиттә, уҡыусыларҙың теләгенән, ҡыҙыҡһыныуынан башҡа яҡшы һөҙәмтәләргә ирешеп булмай. Шуға ла рус мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү ҙур теләк тыуҙырырлыҡ, яратырлыҡ итеп ойошторолорға тейеш. Дәрестә уйын элементтарын ҡулланыу, күргәҙмә материалдарҙы урынлы файҙаланыу уҡыусыларға өйрәнелә торған материалды яҡшы итеп иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә. Ошондай күнегеүҙәрҙе системалы рәүештә үткәрһәң, балаларҙың һүҙ байлығы артыр, яҙма эштәрендәге, һөйләү телмәрендәге хаталар күҙгә күренеп кәмер һәм башҡорт теле дрестәре ҡыҙыҡлыраҡ та булыр.

### Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Башҡорт алфавиты. Өфө. 2005.
2. Башҡортостан уҡытыусыһы. № 6, 2005.
3. Аслаев Т.Х. Уйнат, уйлат баланы. Өфө: Китап, 1993.
4. Шарапов И.Ә. Урыҫ мәктәптәренең башланғыс синыфтарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре. Өфө: Китап, 1997.
5. Биккужина Т.Ә.,Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт дәрестәрендә картиналар файҙаланыу. СДПИ, 1992.
6. Ҡыҙыҡлы грамматика. Өфө: Китап, 1993.
7. Башҡорт теленән программа. Өфө. 2003.

*Салимьянова Гузель Фаритовна*
*Яппарова Роза Акрамовна*
*Каримова Лилия Зиннуровна*
*Мурясова Айгуль Надировна*

**Некоторые приемы обучения башкирскому языку русскоязычных детей**

*Методическое пособие*

Зав. РИО Л.Ю. Королева

Редактор Г.Р. Милиахметова

Компьютерная верстка и макет:
Г.Р. Милиахметова

Подписано к печати 15.05.09.
Бумага писчая. Формат 60x84 1/16.
Гарнитура Times New Roman, a_Helver (05%) Bashkir
Отпечатано на ризографе.
Усл. печ. л. 1,7. Уч.-изд. л. 1,8.
Тираж 50 экз. Заказ 081.
Цена договорная.

Издательство Башкирского института развития образования.
450005, Уфа, ул. Мингажева, 120.